**Фахри Кужиндың тыуған яҡ тураһында әҫәрҙәре.**



**Юлыҡ**

Беҙҙең яҡты тау-таш тиҙәр,
Әйтерһең унда юл юҡ.
Ҡаф тауы артында түгел,
Еҙем буйында Юлыҡ.
Тик ул хаж урыны түгел,
Ожмахта түгел, юҡ, юҡ.
Сит-ят ерҙә йәм тапмаһаң,
Беҙҙең Юлыҡҡа юлыҡ.
Гиҙерһең урман-ҡырҙарын,
Йөҙөрһөң Еҙемендә.
Бала саҡта ҡолас ташлап,
Күп йөҙҙөм мин дә.
Үҙе алҡын, һыуы һалҡын
Ләҙҙәтлеге ни тора.
Ышанмаһаң,
Был төйәккә
Үҙең бер килеп ҡара.
Автобустар йөрөп ята
Хәрезең булһа юллыҡ
Бер нимәгә лә ҡарамай
Әйҙә Юлыҡҡа юлыҡ.
Егеттәрҙең күплегенән
Атлап үтерлек юл юҡ.
Һәр береһе баһадирҙай
Тик килендәргә ҡытлыҡ.
Һый-хөрмәтен дә табырбыҙ
Хәҙер бит беҙҙә муллыҡ.
Кинәнеп бер ял итерһең
Беҙҙең яҡтарға юл тот.

**Тыуған ерем.**

Маңлайымда ҡырҙар арҡан һайын,
Мин һағынам малай саҡтарҙы.
Тал сыбығы болғап йөрөгән
Кәкере башлы таяҡ аттарҙы.
Алыҫ- алыҫтар ҙа йөрөһәм дә
Һағынамын тыуған яҡтарҙы.
Индәремдә ята заман йөгө-
мин һағынам малай саҡтарҙы.
Күҙ алдыма килә болондары,
Ҡолондары, юртаҡ аттары.
Әле һаман эйәрләйһе килә
Бөркөт кеүек сая саптарҙы.
Тай ялына йәбешәһеине,

Осаһы ине йыраҡ яҡтарға,
Ел булып бер ҡайтаһы ине
Йәшлегемә, бала саҡтарға.
Ғәмһеҙ бала сағым, тау буйҙары,
Бер үтәһе, ине яңынан.
Ғәзиз ерем! Мин бит һине
Шул бер малай булып һағынам.

**Ауылым**

«Тау башында һалынғандыр
беҙҙең ауыл,
Ғ. Тукай.

Тыуған ауылым йәйрәп ята
Мағаштауҙың итәгендә.
Әгәр бер килеп күрһәгеҙ,
Йәмле йәйҙең иртәһендә,
Мәңге ғашиҡ булырһығыҙ,
Тағыла килгегеҙ килер.
Иркә елдәре иркәләр,
Шуҡ йылмайып ҡояш көлөр.
Һауалар саф, йылғалар киң,
Зәңгәр диңгеҙмени күге.
Йөрәкте өҙөп саҡыра
Йәйге иртәлә кәкүге.
Көмөш билғау ауылыма –
Еҙем йылға ағып ята.
Һандуғастар иртә тора,
Таңдары башҡаса ата.
Эшкә типһәң, йырға тиһәң,
Бигерәк уңған килендәре.
Ҡыҙҙары бешкән сейәләй,
Янып тора ирендәре.
Эшсән халыҡ, йомарт халыҡ
һиммәткә, был ниғмәткә
..ыша ҡолондар ҙа.
Юлыҡҡа юлыҡҡан кешеләр
?Уны урап уҙмаҫтар,
Алыҫ Венеция ары торһон
Ауылымдай матур булмаҫтар.

**Еҙем буйҙарына ҡайтам.**

Еҙем буйҙарына ҡайтам,
Ҡайтам малай сағыма,
Ҡырсынташҡа һеңеп ҡалған
Эҙҙәремде һағынам.
Тик Еҙем буйында ғына
Моңло һайрай һандуғас.
Кәкүк өҙөп сығара,
Тирә-яғы моң булғас.
Тик Еҙем буйында ғына
Гүзәлдәре ҡыҙҙарҙың.
Күҙҙәренде ҡамаштырыр
Сәскәләрҙе ҡырҙарҙың.
Еҙем буйҙарына ҡайтып,
Хайран ҡалам ағышына.
Моңло йыры һеңеп ҡалған
Шатлығыма, һағышыма.
Еҙем, Еҙем! Туҡтамайса

Ағаһың да ағаһың.
Бәлки,онотмағанһындыр
Ҡыйғыр бөркөт балаһын.
Еҙем буйҙарына ҡайтам
(Өҙгәнем юҡ өмөтөмдө).
Һине мактап туялмаған
Ҡартаймаç бер егетенде.

**Мағаш, Мағаштау**

Мағаш ауылы, ҡайһы яҡтан ҡараһаң да, бер төрлө күренә -- түңкәрелгән янға оҡшап ята. Ул, гүйә,халҡыбың сурҙәрен һаҡлай 50-се йылдарҙа беҙҙең яҡтарға ял итергә башҡорт халыҡ шағиры Рәшит Ниғмәти, яҙыусы Шағирыбыҙ Мағаш тигән шиғырында Салауат Юлаев яуындағы хәлде ошолай яҙа

*Бер әкиәт бар:*
*имеш, Ир Салауат*
*Ошо ерҙән үткән сағында*
*Дошманына үлем атҡан янын*
*Һалып торған Мағаш*
*тауына.*
*Батыр иткән саҡта,*
*уны оҙатып,*
*Шаулашҡандар бында*
*Ағастар,*
*Тау өçтөндә яткан*
*янды алғас,*
*Ян һүрәте ҡалған*
*Мағашта.*
*Мин ышанам быға*
*Ир Салауат*
*Яуға сапҡан бына ошонан.*
*Мағаш тауҙы тип ян менән*
*түгел,*
*Йәне менән дә ул*
*ҡурсыған.*

Мағаштауҙа Йылансағыл тигән бер битлаү бар. Ололарҙың, Йылансағыл төтәй, ахыры, яуынға тартыр, тигән һүҙҙәрен әле лә йыш ишетергә мөмкин. Нимә ул Йылансағыл? Был атаманы аңлар өсөн, тарих биттәренә күҙ һалайыҡ.Тарихсы Ә.Усмановтың күптән донъя күргән «Салауат батыр» тигән китабында былай тиелә:«Яҡтыкүл ауылынан ярайһы ғына уҡымышлы, сәсән Вәлиулла Ҡоломбәтовтың күрһәтеүенсә, Салауат Юлаев яугирҙарының бер төркөмө ошо Йылансағылдан тороп әбей батша ғәскәрҙәренә ҡаршы ук-һаҙаҡ менән ҡаты алышҡан.Шул һуғыштан һуң Ташаçты ауылы янындағы ҡая Уҡлы ҡая булып ҡалған. Мағаштау битендәге һырт Йылансағыл тип йөрөтөлә башлаған. Вәлиулла Ҡоломбәтовтың күрһатеүе буйынса, Салауат ғәсҡәренең бер төркөмө шунда землянкала ятҡан. Төндә ҡуйындарына йыландар тулып ята торған булған.»

Эйе, бында дөрөçлөк бар. Землянкала эҙе Бөйөк Ватан һуғышынан һуң да ныҡ беленә ине әле. Куп йылдар үтеүгә ҡарамаçтан, бында хатта ук башаҡтары, патрон кеүек әйберҙәр табыла торғайны. Йылансағыл тип әйтеүҙең дә дөрөçлөккә тап килеү һис кенә лә ғәжәпләндермәй. Сөнки йыландар әле лә тап ошо сағылда мыжғып тора. Элек беҙ унда мәктәп уҡыусылары менән йыл да экскурсияға бара торғайныҡ. Тик шуныһы аяныс: хәҙер беҙ тарих эҙләп йыраҡҡа сабабыҙ, күҙ алдындағы йәнле тарихты ихтибарҙан ситтә ҡалдырабыҙ.

Пугачевсылар востаниеһын өйрәнеүселәр Йылансағыл, Уҡлы ҡая, Табын тигән тарихи урындарҙы ниңәлер урап үтә.

Әгәр бындай мәғлүмәттәргә ваҡытында иғтибар итмәһак, киләсәк быуындың бөтөнләй онотоуы бар.

Ә шағир Рәшит Ниғмәти «Мағаш» тигән шиғырын ошондай һүҙҙәр менән тамамлай:

…Алтын тауҙар алтын булһалар ҙа,
Мағаш кеүек матур булмаҫтыр!

Ф.Ҡужин. 20.07.1989

## ЕҘЕМГӘ БИРҺЕН ТҮҘЕМ

Был йылға тураһында яҙырҙан элек Һабай аулында йәшәүсе уҡытыусы- пенсионер Әхтәрйән Әбүбәкеров һөйләгән легенда иҫкә төштө.

Борон заманда булған был ваҡиға. Элек Уҡлыҡая тауы аҫтында ла тормош гөж килеп ҡайнап торған: байҙар көтөү- көтөү мал аҫыраған, ә ярлылар, уларға бил бөккән. Ә Уҡлыҡая тауы тирәһендә тәбиғәт ғәжәп бер сәхрә булған. Тауҙы уратып бер йылға аҡҡан. Ошондай йәмле тәбиғәттең бер гүзәллеге булып, үтә ярлы кешенең һылыу ҡыҙы тыуып, зифа талдай буй еткергән. Уға ыласын кеүек егеттәр ғашиҡ булған. Төҫкә йәмһеҙ серегән бай улы ла уға күҙ ата һәм яусы ебәрә. Ҡыҙҙың ата- әсәһе: «Беҙгә оло башын кесе итеп бай яусы ебәргән, беҙҙе ололаған»,- тип, ҡыҙҙы бай улына бирергә ҡарар итәләр. Ләкин ҡыҙ быға ҡаршы төшкән, сөнки уның үҙе яратып йөрөгән егете булған.

Уҡлыҡая итәгендә сираттағы оло йыйын була. Ара- тирәләге ауылдарҙан халыҡ күп йыйылған. Нәҡ ошо йыйындан файҙаланып, байҙың улы ҡыҙҙы урларға була. Тегенең ниәтен иптәштәре ҡыҙға ла, егеткә лә еткереп өлгөрә. Ярлы егеттең иптәштәре ваҡытты һуҙыу, берәй хәйләһен табыу өсөн текә тауҙан таш тәгәрәтеү уйыны ойошторалар. Кемдең ташы иң алыҫ тәгәрәй – шул еңеүсе. Барлыҡ йәш- елкенсәк таш тәгәрәтеү уйыны менән мәшғүл булған саҡта бай малайы ярлы егетте ажғырып ағып ятҡан йылғаға төртөп осора. Был хәлде һиҙеп ҡалған егеттәр ҡаршы ярҙа йылмайып баҫып торған.

- Нисек сыҡтың? – тип һорайҙар.

- Йөҙҙөм. Йөҙҙөм. – тип ҡысҡырып ебәргән.

Егеттең был оранын йылға буйындағы тирәктәр ҙә, һандуғастар ҙа, бар тәбиғәт отоп ҡалған. Шунан ошо йылға буйында йәшәгән халыҡтар уға «Еҙем» тип исем биргән. Еҙем- йылғаһының таҙалығы, яр буйҙарындағы тәбигәттен матурлығы, гүзәллеге менән данлана, ул – райондын төп йылғаһы. Башын Елмерҙәк тауының төньяк-көнбайыш итәгенән – Белорет районы Хоҙайбирҙе ауылы эргәһендә килеп ҡоя. Үкенескә ҡаршы, һуңғы йылдарҙа тәбиғәттең хозурлығын,байлығын һаҡлау,ҡәҙерләү урынына уға йәбер ҡылыусылар артҡандан-арта бара.Бында, бөтәһенән элек, путевкалы һәм путевкаһыҙ туристар күҙ уңында тотола.Улар йылғаның үрге ағымында Башҡортостандың «Ҡыҙыл китабы»на индерелгән бәрҙе, бағры,ҡыҙыл балыҡтарҙы вәхшиҙәрсә ҡыра,һирәк осрай торған,һунар тыйылған һыу ҡоштары аулай. Биология фәндәре докторы, профессор Е. В. Кучеров экспедиция ваҡытында Таҡаты йылғаһы буйында һаҡлауға мохтаж булған, һирәк осрай торған үҫемлектәр, Талпар ауылы тирәһендә бынан бер нисә йыл элек СССР-ҙың «Ҡыҙыл китабы»на индерелгән үҫемлектәрҙе тапҡан.Ғафури районы биләмәләрендә 1965 йылда биш объект дәүләт тәбиғәт ҡомартҡыһы тип иғлан ителгән.Шуларҙың иң ҡәҙерлеһе- Имәндәш ауылынан өҫтә, Еҙем йылғаһының уң яҡ ярындағы Киндерле мәмерйәһе.Бынан байтаҡ йылдар элек сит ил ғалимдары ҡатнашлығында фәнни конферициялар үткәрелде.Әле уның ниндәй хәлдә булыуы менән ҡыҙыҡһынған кеше юҡ. Тик йәй көнө үткенсе туристар һәм мәктәп укыусылары ғына һуғыла унда.Заманында геология- минералогия фәндәре докторы профессор Вахрущев иптәш (ул да беҙҙең яҡташ, Некрасовка ауылында тыуған) Таш- Аҫты ауылы эргәһендә Әсе йылғаһы һыуының күп кенә ауырыуҙарға шифа булыуын яҙып сыҡты. Ләкин үткән заман етәкселәре был фекергә ышанманы. Әле лә хәлдең үҙгәргәне юҡ.

Еҙем йылғаһы буйында «Еҙем», «Мағаш», Мәжит Ғафури исемендәге колхоздарҙың йәйләүҙәре урынлашҡан. Был хужалыҡтарҙың етәкселәре «минән етәксе, эйәһенә еткәнсе» тигән шикелле йәшәй бирә. Әгәр Еҙем буйы туғайҙарында бөрлөгән, ҡарағат, балан кеүек емештәрҙе элек телгәнсә йыйып булһа, хәҙер йылғаның түбәнге өлөшөндә йүнле үлән дә таба алмаҫһың. Мал тапап бөтөрә.

Әйтеүе оят: күп ауылдарҙың эсәр һыуы булған йылға яры сүплектә, мал тиҙәге ташлау урынына әйләнә. Тәбиғәткә, тыуған төйәккә бындай вәхшиҙәрсә ҡарашҡа күпме түҙергә булла? Киләсәк быуынға ниндәй Еҙем ҡалдырыу тураһында халыҡ үҙе баш ватырға һәм

саралар күрергә тейеш. Тәбиғәт: «Мине ҡотҡарығыҙ!», - тип һөрән һала, ишетәйексе уның тауышын.